Әнүр Вәхитовтың "Өс бөртөк бойҙай" әҫәрен ҡабатлау

(VI класс)

З.Р. Таһирова,

Йылайыр районының Йомағужа урта мәктәбе уҡытыусыһы.

Маҡсат: Ә. Вәхитовтың ижады буйынса белгәндәрҙе тулыландырыу, системалаштырыу. Хикәйәләү тураһында төшөнсә биреү; "Өс бөртөк бойҙай" хикәйәһенең йөкмәткеһенә бәйләп, икмәк, уның кеше тормошондағы роле хаҡында әңгәмә ҡороу, фекерҙәр менән уртаҡлашыу, уйланыу, бер-береңә ҡарата ихтирам, ярҙамсыллыҡ сифаттарын тәрбиәләү; үҙ аллы фекерләү ҡеүәһен, хәтерҙе үҫтереү; коммуникатив эшмәкәрлекте ойоштороу; **и**кмәккә һаҡсыл ҡараш, хөрмәт, икмәксе һөнәренә ихтирам тәрбиәләү.

Дәрес төрө: белем һәм күнекмәләрҙе системаға һалыу, белгәндәрҙе камиллащтырыу;

Планлаштырылған һөҙөмтәләр

Универсаль уҡыу эшмәкәрлеге.

Шәхескә йүнәлтелгән: яңыны белеү, белгәндәрҙе камиллаштырыу теләге уятыу;

Регулятив: уҡытыусы менән берлектә дәрес темаһын, маҡсатын билдәләргә күнегеү, булған белемдәрен барлау, баһалау;

Танып белеү: теманы тормош менән бәйләү, өлгө буйынса эш итә белеү, төркөмдә эшләү;

Коммуникатив: һорауҙар биреү, уларға яуаптар эҙләү, башҡа уҡыусыларҙы иғтибар менән тыңларға теләк уятыу, төркөмдә бергә эшләй белеү;

Бурыстар: үтелгән материалдарҙан, эштәрҙән сығып, һығымта, йомғаҡлау яһарға, үҙ-ара хеҙмәттәшлек итергә өйрәтеү, һөҙөмтәне һәм белемде үҙләштереү кимәлен күҙҙаллау; игенсе һөнәре менән таныштырыу, ҡыҙыҡһыныу уятыу;

Йыһазландырыу: Ә. Вәхитовтың портреты, интерактив таҡта, ноутбук, пилотка, иген культуралары, бешкән икмәк, таҡта, карточкалар, дәреслек.

Дәрес барышы

I. Эшмәкәрлеккә әҙерлек. Ыңғай мотивация булдырыу.

Һаумыһығыҙ! Һаумы әле!

Ниндәй йылы һүҙ икән!

Һәр күңелде иретерлек,

Һәр кемгә лә үҙ икән.

Берәү әйтә танышына:

“Туған, хәйерле иртә!”

Йылы һүҙҙән тыуған шатлыҡ

Көнө буйына етә.

Хәйерле көн ҡәҙерле уҡыусылар!

Ошондай матур иртәлә һеҙҙе күреүемә бик шатмын. Көндө– сағыу ҡояш, кешене яҡшы уйҙары, изге эштәре биҙәй. Шуның өсөн һәр көнөбөҙҙө файҙалы итеп үткәрәйек, бөгөнгө дәресебеҙҙең һәр минуты һеҙгә тик яҡшылыҡ алып килһен, бының өсөн бар көсөбөҙҙө, бар тырышлығыбыҙҙы һалайыҡ.

Бөгөн беҙ һеҙҙең менән төркөмдә эшләйәсәкбеҙ. Һәр кем төркөмдө яҡшы яҡтан күрһәтеү өсөн тырышып эшләргә тейеш.

II. Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу

Уҡыусылар, мин һеҙгә көнсығыш халыҡ әкиәтен уҡып ишеттергем килә.

Ғәббәс бик ярлы ер эшсеһе була. Көнө буйы эшләй ҙә эшләй икән. Буш ваҡытында нисек кенә берәй байлыҡ табып байып китергә тип баш вата икән.

Шулай бер эҫе көндә ял итергә тип ағас төбөнә барып ята ла хыялға бирелеп китә: “Эх, Аллаһы Тәғәлә миңә мөғжизәле көс бирһә ине, нимәгә тотонһам да алтынға әйләнһә ине, йонсоп эшләп тә йөрөмәҫ инем, бөтә нимәне алтынға әйләндерер инем”- ти икән.

Ҡапыл бер тауыш ишетеп ҡала:

— Эй, Ғәббәс! Ошо теләгеңде тормошҡа ашырам, йә берәй әйбергә ҡағылып ҡына ҡара,- ти икән. Ғәббәс үҙ ҡолағына үҙе ышанмай. Бәләкәй генә ташҡа тейеп ҡарай, таш шунда уҡ алтынға әйләнә. Шулай итеп уның тирә-яғы алтынға күмелә. Ғәббәс шатланып китә лә. Хәҙер икмәк ашап, һөт кенә эсеп алам да ҡалаға барып бөтә әйберҙе алтынға әйләндерәм, шул алтынға күп ер алмашам, аттар һатып алам, үҙемә алтын һарай төҙөп ултыртам, күп итеп матур кейем алам тип уйлай икән.

Шул саҡ икмәккә ҡағылған икән уныһы алтынға әйләнгән. Икенсе телемде алһа- ул да алтынға әүерелгән. Ғәббәс аптырап ҡурҡып киткән. Хәҙер ул нисек итеп икмәк ашар? Нисек итеп һыу эсер?

Бер телем икмәкте лә ашай алмайынса аслыҡтан ятып үлеүен күҙ алдына килтергән. Шул саҡ игенсе эшен, икмәкте һис ҡасан бер нимәгә алыштырғыһы килмәүен аңлап иларға тотонған. Һәм ҡапыл уянып киткән.

-Эй , Аллам, төш кенә булған икән, тип ҡыуанып киткән һәм икмәк– донъяла иң ҡәҙерлеһе икәнен аңлаған.

Уҡыусылар, ә һеҙ икмәк тураһында ниндәй әҫәрҙәр беләһегеҙ? (һанайҙар)

Әнүр Вәхитовтың “Өс бөртөк бойҙай” әҫәрен әйтеп үттегеҙ.

Ул әҫәрҙе яңыраҡ ҡына уҡып үттегеҙ, онотманығыҙмы? Әҫәр оҡшанымы?

Тимәк, беҙ һеҙҙең менән нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ, нимә менән шөғөлләнәсәкбеҙ? (Әнүр Вәхитов “Өс бөртөк бойҙай” әҫәренә анализ)

Уҡыусылар, һәр дөрөҫ яуап өсөн мин һеҙгә берәр **бойҙай** бирәсәкмен. Кем күберәк бойҙай йыя– шул төркөм еңеүсе буласаҡ.

III. Уҡыу мәсьәләһен сисеү. Белемде актуалләштереү

1. Автор тураһында белешмә

1-се СЛАЙД: Әнүр Вәхитов портреты

Портретта бирелгән шәхес тураһында нимә әйтә алаһығыҙ? (Нисәнсе йылда тыуған, ҡайҙа тыуған, ниндәй йыйынтыҡтарын беләһегеҙ?)

(яҡынса яуаптар: 1932 йылда Ғафури районы Туғай ауылында тыуған, “Салауат күпере”, “Ҡайын суҡтары”, “Шәжәрә”, “Яҡты күңел”, “Сейәлетүбә”)

2. Һүҙлек эше

Әҫәрҙе уҡыған ваҡытта ят һүҙҙәр осранымы? Таҡтаға ҡарайыҡ әле!

2-се СЛАЙД

Гәрәбә- ҡаҙылма матдә, биҙәнеү әйбере һәм дарыуҙар яһау өсөн ҡулланыла.

Өрлөк- түбәне тотоп тороусы ағас

Колхоз идараһы- етәкселек

Түрбаш-сәй эсеү урыны (кухня)

Һары булыу- һары ауырыуы

Юҫыҡ- йүнәлеш

Аҙарыныу- көйәләнеү

Баш ҡоҫоу- башаҡланыу

Ҡурпы- сабылғанғандан һуң кире үҫкән үлән

Яҫмаҡ- шыма

Шараҡ ҡул- ярылған ҡул

Бигерәк тә ят тойолған өс һүҙҙе күсереп яҙып алығыҙ.

3. Әҫәр тураһында әңгәмә. Белемде нығытыу.

Ни өсөн әҫәр “Өс бөртөк бойҙай” тип атала?

Әҫәрҙең жанры? (хикәйә)

Әҫәрҙең темаһы тураһында нимә әйтә алаһығыҙ? (Аслыҡ, һуғыш темаһы)

Идеяһы нимәнән ғибарәт? Автор беҙгә нимә әйтергә теләй? (икмәкте һаҡларға, ҡәҙерләргә)

Композицияһы буйынса нисә өлөшкә бүлеп була? (һәр өлөшкә исем бирегеҙ һәм таҡтаға сығып яҙығыҙ)

Хикәйәләү кем исеменән алып барыла? (Зиннур ағай)

Ул ҡайҙан ҡайтҡан?

Ни өсөн малайҙарға бойҙай бирергә була?

Малайҙарҙың исеме кем?

Зиннур ағай барғанда Мөзәйәнә еңгә ниңә илап ултыра?

Әхәт менән Әфҡәт Зиннур ағай биргән бойҙайҙы нимә эшләтәләр?

Баҡсала бойҙайҙан тыш нимәләр үҫә?

Зиннур ағай ни өсөн килә уларға? Улар нимә эшләп йөрөй?

Әхәт ни өсөн ауырып китә?

Нишләп бойҙай баш ҡоҫмай?

Зиннур ағай Мөзәйәнә еңгәне нимә тип йыуата?

4. **Төркөмдәрҙә эш.**

Уҡыусылар әҫәрҙә нығынған һүҙбәйләнештәр ҙә, эпитеттар ҙа осрай. Беренсе төркөм фразеологизмдарҙы, икенсе төркөм эпитеттарҙы табып дәфтәргә яҙа.

(Фразеологизмдар, мәҫәлән, йөрәк һыҙлау, аяҡтан йығылыу, баш ҡоҫоу, түбәһе күккә тейеү

Эпитеттар: ҡаты һуғыш, ауыр хәбәр, зәғиф йылмайыу)

5. **Тикшереү. Һығымта яһау.**

IV. Ял итеү. (Уҡыусылар “Тыныслыҡ” йырына бекеп алалар)

V. Дәреслек өҫтөндә эш.

- Уҡыусылар, һеҙҙең өҫтәлдә киләһе эш өсөн карточкалар ята. (Беренсе төркөм Зиннур ағайға һәм Әхәткә, икенсе төркөм Мөзәйәнә еңгә менән Әхнәфкә ҡылыҡһырлама бирергә) Уҡып ишеттерәләр.
- Үҙегеҙгә оҡшаған бер өҙөктө сәхнәләштереп күрһәтегеҙ.

- Икмәк тураһында яҙылған һөйләмдәрҙе табығыҙ. Уҡып ишеттерәләр.

Икмәк- тормош. Икмәк- бөйөк һәм изге. (Дәфтәргә яҙып ҡуяйыҡ)

Предмет-ара бәйләнеш.

Ысынлап та, икмәк тураһында бик матур һүҙҙәр яҙылған. (Күргәҙмә менән эш. Иген культураһының ниндәй төрҙәре һеҙҙең алда?

Быларҙың ҡайһыныһы артыҡ? (арпа һәм һоло иген культураларына ҡарай, кукуруз артыҡ)
Кукуруз
Арпа
Һоло

Был бөртөктәр һеҙгә танышмы? (Бойҙай, һоло, етен) Етендән май алалар, туҡыма эшләйҙәр. Биология дәресендә яҡындан танышырһығыҙ)

3-сө СЛАЙД

Икмәк тураһында матур һүҙҙәр күп булған кеүек, рәссамдәр, скульпторҙар был өлкәлә бик матур эштәр эшләгәндәр (слайдта скульпторҙар һәм рәссамдәр эштәре)

VI. Өй эше.

1. Икмәк тураһында биш мәҡәл яҙып килергә.
2. 2023 йылда Башҡортостанда иғлан ителгән “Атайсалға изге эштәр йылы” на эмблема төшөрөргә.
3. Әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләп килергә.

VII. Дәресте йомғаҡлау. Эшмәкәрлеккә рефлексия.

Уҡыусылар, беҙҙе әҫәр нимәгә өйрәтә? (Икмәкте һаҡларға, тырыш булырға)

Әйтегеҙ әле, нимә була ул прототип?

Прототип ул– әҙәби персонажға өлгө итеп алынған кеше.

4-се СЛАЙД (Әхнәф Ниғмәтуллин)

Таҡтала фотоһүрәт. Кем ул?

Ул беҙҙең әҫәрҙәге Әфкәт исемле малайҙың прототибы Әхнәф Ниғмәтуллин. Бөгөнгө көндә Ҡырмыҫҡалы районы Шайморат ауылының имам- хатибы, активисы. “Атаҡлы игенсе булып килер әле” тигән һүҙҙәр дөрөҫкә сыға. Ул оҙаҡ йылдар колхоз рәйесе булып эшләй. Бик күп почет грамоталары менән бүләкләнә. 1996 йылда Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре тигән исемгә лайыҡ була.

Уҡыусылар, мин ошо олатайҙы таптым һәм миңә уның менән бәйләнешкә инергә насип булды. Ул һеҙгә лә күп сәләм ебәрҙе. (Әхнәф Ниғмәтуллин. Видеояҙма)

Беҙҙең әҫәр бөгөнгө көндә актуальмы? Ни өсөн? Һуғыш бара. Аслыҡ булмаһын. Бөгөнгө дәрес өсөн барығыҙға ла ҙур рәхмәт. Илдә тыныслыҡ булһын. Атайҙар, ағайҙар, улдар янда булһын. Икмәгебеҙ мул булһын, уҡыусылар!

VIII. Баһалар ҡуйыу.

Бойҙай бөртөктәрен һанап, командаларҙың эшен билдәләү.